**Т** **2.** Научитесь задавать вопрос и отвечать на него.

— Эт ниндәй? Эт (көслө, ҙур, уҫал, аҡыллы...)
— Бесәй ниндәй? Бесәй (иркә, йомшаҡ, йөнтәҫ, матур...)

**П** **3.** Прочитайте и продолжите диалог.

— Сәләм, Артур! Был һинең этеңме?
— Эйе, минеке.
— О-о-о! Бик шәп эт! Ҡушаматы нисек?
— Рекс. Ә һинең этең бармы?
— Юҡ, бесәйем генә бар. Ул...
— Ә минең этем...

Это интересно

Во Франции сенбернару поставлен памятник. Эта собака спасала людей, сбившихся с пути в горах. Сенбернар спас 40 человек, а 41-й убил собаку, приняв её за волка.

## 44 Ни эшләй? Что делает?

**А** Бесәй, бесәй, бесәй, шул,
Бесәй әле кескәй, шул.
Үҙе мырлай ҙа мырлай,
Әллә ул шулай йырлай.

— Килтерегеҙ сысҡан, — ти,
— Ҡайҙа һуң ул ҡасҡан? — ти,



Килтерегеҙ хәҙер, — ти,
Мин ашарға әҙер, — ти.
Бына ниндәй бесәй ул,
Әлегә бик кескәй шул.

(Ҡадир Даян)

Как ты думаешь, это большой кот или котёнок?

**1.** Познакомься с новыми словами.


йоҡлай


ҡаршылай


һикерә


уйнай

**П** **2.** Научитесь задавать вопрос и отвечать на него.

| | |
|---|---|
| Эт ни эшләй? | Эт өрә, һаҡлай, ырғый ... . |
| Бесәй ни эшләй? | Бесәй мырлай, шаяра, битен йыуа ... . |
| Ташбаҡа ни эшләй? | Ташбаҡа йәшенә, йоҡлай ... . |
| Тутыйғош ни эшләй? | Тутыйғош ҡабатлай, үсекләй ... . |

**3.** Выпиши в два столбика имена кошек и собак.

Джек, Аҡтүш, Лайка, Һарыбай, Мурка, Мыраухан, Муйнаҡ, Полкан, Аҡтырнаҡ, Бим, Барсик...

**4.** Прочитай текст. Попробуй пересказать. Оцени свою работу.

Минең этем бар. Уның ҡушаматы — Бим. Бим — ҙур эт. Ул көслө, уҫал, бик аҡыллы. Көн дә мәктәптән ҡаршылай, уйнай. Мине ярата, көтөп ала, һағына.

**5.** Расскажи о своём любимом животном.

**өрә** — лает
**мырлай** — мурлычет
**йәшенә** — прячется
**ҡабатлай** — повторяет

**үсекләй** — дразнит
**шаяра** — играет
**һаҡлай** — охраняет
**һалбыр ҡолаҡлы** — лопоухий (-ая, -ое)

## 45 Ни эшләй? Что делает?

А

Бесәй, бесәй,
Бес-с, бес-с...
Баҙға төшкән,
Һөт эскән,
Өйгә инеп
Ҡасҡан.

(Халыҡ ижадынан)



**1.** Прочитай текст.

Тыуған көнөмә атайым аквариум бүләк итте. Вәт шәп булды! Әсәйем менән магазиндан балыҡтар ҙа һатып алдыҡ. Шундай матурҙар!

Аквариумда балыҡтар рәхәтләнеп йөҙә, ашарға эҙләй. Мин уларҙы ашатам, күҙәтеп ултырам. Бесәйем дә ҡарап ултыра, тәпәйе менән аквариумға һуғып ала. Был балыҡтарға тейергә ярамай шул!

Озаглавь текст.

Прочитай предложения. Отметь правильные варианты.

| | + | − |
|---|---|---|
| 1. Атайым менән магазиндан балыҡтар һатып алдыҡ. | | |
| 2. Балыҡтар йөҙә, ашарға эҙләй. | | |
| 3. Бесәйем ҡойроғо менән аквариумға һуғып ала. | | |

Т **2.** Прочитайте диалог.



— Ринат, балыҡҡа бараһыңмы?

— Эйе, барам.

— Иртәнге биштә китәбеҙ.

— Бик иртә бит!

— Олатайым иртән балыҡ шәп эләгә, ти.

Поговорите в группе о секретах рыбалки.

**йөҙә** — плавает
**ашарға эҙләй** — ищет еду

**күҙәтеп ултырам** — наблюдаю
**һуғып ала** — постукивает

## 46 Ҡайҙа? Где?

**А** — Айҙар, балыҡҡа бараһыңмы?

— Юҡ, бармайым.

— Ә ниңә?

— Аквариумдағы балыҡтарҙы ашатырға, һыуын алыштырырға кәрәк.

— Өйҙәге балыҡты ҡарауы еңел түгел икән.

**1.** Ты знаешь этих животных? Вспомни, где их видел. Где они живут?



Ө л г ө : Фил Африкала йәшәй.

**Ҡулланыу өсөн һүҙҙәр:** урманда, ағас башында, зоопаркта, сүллектә, тайгала.

**2.** Внимательно прочитай текст и скажи, о каком животном идёт речь.

а) Был хайуан ҙур. Ул Африкала, Һиндостанда йәшәй. Ҡолаҡтары ҙур, мороно оҙон, аяҡтары йыуан, ҡойроғо бәләкәй генә. Ул сысҡандан ҡурҡа.

б) Был хайуан бәләкәй. Африкала, Һиндостанда йәшәй. Ул банан ярата.

**3.** Найди пары слов и соедини стрелкой.



| | |
|---|---|
| эт | ерҙә |
| бесәй | ағас башында |
| ташбаҡа | аквариумда |
| балыҡ | диванда |
| тутыйғош | ояла |



Т **4.** Опишите одно животное. Другие группы должны угадывать. Оцените свою работу.

Это интересно

Слово «верблюд» произошло от арабского слова «красота». Верблюды могут полностью закрыть свои ноздри от ветра и песка, когда необходимо. Они могут выпивать до 200 литров воды зараз. Если верблюд лёг спать или просто отдохнуть, то заставить его встать невозможно, пока он сам не захочет этого. Верблюды могут

пинать ногами во всех четырёх направлениях. Их мех отражает солнечный свет и защищает тело от высокой температуры пустыни.

В Северной Африке верблюд является священным животным.

## 47 Ҡайҙа? Где?

**А** Азат менән Фәниә тәнәфестә һөйләшәләр.

— Әйҙә зоопарк уйнап алайыҡ.

— Әйҙә. Тик нисек була ул?

— Мин маймыл булам, — ти Фәниә. — Һин мине банан менән һыйла.

**1.** Ты знаешь этих животных? Вспомни, где их видел.

| | | |
|---|---|---|
|  айыу |  бүре |  төлкө |
|  тейен |  ҡуян |  терпе |

**2.** Составь предложения из данных слов. Оцени свою работу после проверки в классе.

| | | |
|---|---|---|
| айыу | тауҙа | |
| бүре | урманда | йәшәй |
| тейен | өңдә | йәшәмәй |
| төлкө | ағаста | |

**3.** Прочитай стихотворение о ёжике. Постарайся правильно произносить все звуки.



Терпе йоҡламай,
Терпе ашамай.
Беҙҙең өйөбөҙ
Уға оҡшамай.
Уйлайҙыр: күпме
Шулай ятырға?
Ярамағандыр
Уны урмандан
Алып ҡайтырға.

(А. Насретдинова)

**4.** Отгадай загадку.

Сәтләүек ярып ултыра
Ағас башында ... .
Ҡойроғо электән ҡупшы,
Өҫтөндә — матур кейем.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | | | |

**ҡупшы, матур** — красивый (-ая, -ое)

**сәтләүек** — орех

## 48 Ҡайҙан?
## Откуда?

А Борон-борон заманда эт үҙенә хужа эҙләп киткән. Уға бүре осраған. Бүре менән эт бер аҙ йәшәгән. Ләкин бүренең айыуҙан ҡурҡҡанын күргән. Эт айыу менән йәшәй башлаған. Тик айыу арыҫландан ҡурҡа икән. Эт арыҫлан менән йәшәй башлаған. Ә арыҫлан кешенән ҡурҡҡан. Эт кешенең бөтә нәмәнән дә көслө булыуын күргән һәм унда йәшәргә ҡалған.

Попробуй восстановить содержание текста по схеме.

Эт — бүре — айыу — арыҫлан — кеше — хужа.

**1.** Прочитай предложения, сравни выделенные слова. Ты заметил разницу в языках?

Айыу **урманда** йәшәй. Медведь живёт **в лесу.**
Айыу **урмандан** сыға. Медведь выходит **из леса.**

**2.** Внимательно прочитай слова в столбиках. Какой «секрет» ты увидел? Продолжи по образцу.

| **Ҡайҙа?** | **Ҡайҙан?** |
|---|---|
| ағас**та** | ағас**тан** |
| өң**дә** | өң**дән** |
| тау**ҙа** | тау**ҙан** |
| өй.. | өй.. |
| зоопарк.. | зоопарк.. |

**3.** Эти животные тебе знакомы? Какие сказки ты знаешь про этих животных? Составь предложения с этими словами.

| | |
|---|---|
|  ҡурҡаҡ ҡуян |  көслө айыу |
|  уҫал бүре |  хәйләкәр төлкө |

Өлгө: Хәйләкәр төлкөнөң йорто боҙҙан була.
Уҫал бүре Ҡыҙыл Башлыҡты ашай.

**4.** Отгадай загадку.

Йәйен — урманда батша,
Ҡышын ҡарҙан да аҫта.

**сығa** — выходит
**ағас** — дерево
**ҡаса** — убегает

**ҡурҡаҡ** — трусливый (-ая, -ое)
**уҫал** — злой (-ая, -ое)
**энәле** — колючий (-ая, -ее)
**хәйләкәр** — хитрый (-ая, -ое)

## 49 Ҡасан?
## Когда?

А Мин телевизор ҡарарға яратам. Миңә мультфильмдар, хайуандар донъяһы тураһында тапшырыуҙар оҡшай. Жирафтар, зебралар, кенгурулар, маймылдар, крокодилдар, бегемоттар, арыҫландар тураһында тапшырыуҙар булды. Мин шуларҙы ҡараным, күп нәмә белдем.

Названия каких животных не переводятся? Что ты знаешь о них? Принеси свои книжки и расскажи друзьям.

**1.** Учимся задавать вопрос и отвечать на него.

| Ҡасан? | Когда? | Ҡайҙа? | Где? |
|---|---|---|---|
| бөгөн | сегодня | өңдә | в норе |
| кисә | вчера | ағас башында | на дереве |
| иртәгә | завтра | урманда | в лесу |
| иртән | утром | ситлектә | в клетке |
| кис көнө | вечером | тауҙа | на горе |

П **2.** Прочитайте и продолжите диалог.

— Сәләм, Денис!
— Һаумы, Гриша! Ҡайҙа барҙың?
— Класс менән урманға экскурсияға барҙыҡ.
— Оҡшанымы?
— Эйе. Беҙ унда терпе күрҙек.
— Ысынмы?
— Эйе. Терпене тотоп ҡараныҡ.
— ...

**3.** Прочитай текст.

Кисә беҙ урманға экскурсияға барҙыҡ. Унда ҡыҙыҡ икән! Ағас башында тейенде күрҙек. Ул бик етеҙ, күҙҙәре ҡара, ҡойроғо йөнтәҫ. Ә терпе бәләкәй, энәләре осло. Төлкө бик хәйләкәр. Беҙ уны күрмәнек.



Ответь на вопросы. Не забудь обращаться к тексту.

1. Тейен ҡайҙа йәшәй?
   Тейен ... йәшәй.
2. Терпе нindәй?
   Терпе ..., энәләре ... .

### Это интересно

Учёные-генетики доказали, что на самом деле зебра — белая в чёрную полоску, а не наоборот. Каждая зебра имеет уникальный рисунок из чёрных и белых полос, подобно отпечаткам пальцев у человека. По рисунку детёныш зебры узнаёт свою мать. Интересно, что зебры спят не стоя, как все лошади, а лёжа.

## 50 Ҡасан? Когда?

**А** Йәшәгән, ти, төлкө менән терпе. Төлкөнөң күлдәге бик матур икән, ә терпенең күлдәге һоро ғына булған. Төлкө:

— Минең күлдәгем матур, ә һинеке йәмһеҙ. Шуға һине бер кем дә яратмай, ә мине бөтәһе лә ярата, — тигән.

Терпенең асыуы килгән. Шунан үҙенә икенсе энәле күлдәк алып кейгән. Төлкө терпенең күлдәген тотоп ҡарауы булған — илап та ебәргән. Терпе төлкөнө шулай итеп аҡылға ултыртҡан.

**1.** Ты знаешь этих птиц? Познакомься с новыми словами.



турғай ҡарға тумыртҡа сыйырсыҡ

Т **2.** Прочитайте диалог. Что вы знаете об этой птице?

— Мин бөгөн урман докторын күрҙем.
— Бәй, урман докторы булалыр шул?
— Була. Был ҡош урманды ҡорттан таҙарта.
— Ниндәй ҡош ул?
— Тумыртҡа.

**3.** Составь предложения из данных слов.

Өлгө: Тумыртҡа урманда туҡылдай.

| **Нимә?** | **Ни эшләй?** |
| --- | --- |
| һандуғас | ҡарҡылдай |
| ҡарға | һайрай |
| тумыртҡа | туҡылдай |

**4.** Отгадай загадку.

Көнө буйы туҡ та туҡ,
Ағастан ҡорт табып туҡ.
Ағасты ашаған ҡортҡа
Иң ҙур дошман ... .

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | | |

**5.** Прочитай сказку.

## Ҡарға менән турғай



Ҡарға турғай тотҡан. Төлкө:
— Ҡарға, нимә тоттоң?
— Турр... тур... — тигән ҡарға.
— Ишетмәйем!
— Турғай! — тип ҡысҡырған ҡарға.

Турғай осоп киткән. Төлкө ҡарғаға:
— Ҡош, тип әйтергә ине, — ти икән.

**6.** Придумайте сказку про птиц.

### Это интересно

Существует легенда о том, что именно воробей выдал Иисуса Христа своим чириканьем, за это Господь покарал птицу, сделав её маленькой и серенькой. Также легенда рассказывает, что с тех пор на его лапки надеты невидимые оковы, из-за которых ему приходится всё время прыгать.

**тоткан** — поймал
**осоп киткән** — улетел
**дошман** — враг

**ишетмәйем** — не слышу
**ҡысҡырған** — крикнул
**ҡорт** — червь

## 51 Ҡайҙа? Где?

А Малайҙар урмандан терпе алып ҡайтты. Тәүҙә терпене Булат ҡараны. Уға икмәк, һөт бирҙе. Икенсе көндө уны Марат ашатты. Уға алма бирҙе. Бер нисә көндән һуң малайҙар терпене онотто. Ул юғалды. Урманға ҡайтып барғанда, терпене машина тапаған ине.

Ответь на вопросы.
1. Терпе менән нимә булды?
2. Малайҙар урынында һин булһаң, нимә эшләр инең?

**1.** Познакомься с новыми словами. Что ты знаешь об этих птицах?



һайыҫҡан бөркөт күгәрсен кәкүк

**2.** Составь предложения из данных слов.

Өлгө: Бөркөт ҡаяла йәшәй, ҡалала йәшәмәй.

| | | |
|---|---|---|
| тумыртҡа<br>кәкүк<br>күгәрсен<br>бөркөт | ҡаяла<br>ҡалала<br>урманда<br>ауылда | йәшәй<br>йәшәмәй |

**3.** Прочитай стихотворение. Что ты знаешь о кукушках?

## Кәкүк менән Өлфәт



— Кәкүк, кәкүк, миңә әле
Нисә йәш, һанап күрһәт? —
Тип һораны юрый ғына
Кәкүктән бер көн Өлфәт.

— Бер-ике-өс... —
Һанай кәкүк. —
Дүрт-биш-алты-ете, — ти,
Етегә еткәс туҡтаны:
— Ете булғас, етте! — ти.

Ҡысҡырып ебәрҙе Өлфәт:
— Яңылыштың, кәкүк дуҫ!
Минең йәште белгең килһә,
Икегә һин өстө ҡуш!

(Факиһа Туғыҙбаева)

### Это интересно

В 1146 году в Египте появилась первая государственная голубиная почта. В XI—XIII веках почтовый голубь стоил столько же, сколько чистокровный арабский жеребец. А Древний Вавилон был городом голубей. В 2004 году во Владивостоке открылся памятник голубю как символу мира. Подобные памятники установлены ещё в 33 городах по всему свету.

**ҡалала** — в городе
**ауылда** — в деревне
**туҡтаны** — остановился

**яңылыштың** — ошибся
**юрый ғына** — понарошку

## 52 Ҡайҙа? Ҡасан?
## Где? Когда?

### Турғай

А Көн һыуыҡ ине. Тәҙрә төбөнә турғай килеп ҡунды. Тәҙрә янында Марат тора ине. Ул форточканы асты. Турғай өйгә осоп инде. Марат уны ашатты. Туйғас, турғай осоп сығып китте.

**1.** Познакомься с новыми словами.


һандуғас


ҡарлуғас


торна


аҡҡош

**2.** Составь предложения из данных слов.

Өлгө: Сыйырсыҡ ситлектә һайрамай.

| | | |
|---|---|---|
| ҡарлуғас | күктә | оса |
| сыйырсыҡ | бейектә | осмай |
| бөркөт | ситлектә | йәшәмәй |
| тумыртҡа | урманда | һайрамай |

П **3.** Прочитайте диалог и продолжите. Что вы знаете о перелётных птицах?

— Айһылыу һеңлем, тиҙҙән йылы яҡтан ҡоштар ҡайта.

— Ағай, ә ниндәй ҡош иң беренсе ҡайта?

— Иң алда ҡарға ҡайта.

— Ә тағы ниндәй ҡоштар ҡайта?

— Торналар, аҡҡоштар, ..., ..., ..., ... .

**4.** Прочитай стихотворение о ласточке. Выучи его наизусть.



Мин ҡарлуғас, ҡарлуғас,
Ҡайттым бына яҙ булғас.
Оя юҡ тип ҡайғырмайым,
Бейек, текә яр булғас.

(Гөлфиә Юнысова)

Т **5.** Игра «Птицы». Один ученик описывает птицу, не называя её. Остальные должны угадать.

Өлгө: а) Был ҡош аҡ, матур. Муйыны оҙон. Уның тураһында Ганс-Христиан Андерсен әкиәт яҙған.

б) Был ҡош ҙур, суҡышы осло. Ул бейектә оса. Ул ҡуян, төлкө ашай.

в) Был ҡош бәләкәй. Ул матур һайрай. Уның тураһында И. Крылов мәҫәл (басня) яҙған.

**күк** — небо
**оса** — летает
**яҙ** — весна
**бейек** — высоко

**һайрай** — поёт
**оя** — гнездо
**яр** — берег

### Это интересно

Лебеди — красивые, величественные птицы, близкие родственники гусей. Это самые крупные водные птицы.

В мире существует 7 видов лебедей. На территории нашей страны гнездятся лебедь-шипун и лебедь-кликун.

Лебеди — рекордсмены по высоте полёта. Они могут подняться на высоту более 8200 метров.

## 53 Был нимә? Что это?

**1.** Познакомься с новыми словами.




ат ҡолон һыйыр быҙау үгеҙ





һарыҡ кәзә сусҡа

**2.** Детёныши животных называются вот так:

козлёнок — кәзә бәрәсе
ягнёнок — һарыҡ бәрәсе
поросёнок — суҫка бәрәсе (балаһы)
телёнок — быҙау
жеребёнок — ҡолон

**3.** Спиши текст, вставляя пропущенные слова. Проверь и оцени свою работу.

Минең ... бар. Уның ҡушаматы — ... . Ул ... төҫтә. Уның ҡолаҡтары ..., йөнө ... . Аҡбай бәләкәй ... менән уйнай. Мин көсөгөмдө ... .

**Ҡулланыу өсөн һүҙҙәр:** көсөгөм, Аҡбай, аҡ, ҡара, йомшаҡ, туп, яратам.

**4.** Перечисли своих любимых животных и расскажи о них.

Это нужно знать!

В башкирском языке только о человеке можно спрашивать **кто? кем?** Был кем? Это кто? Это Серёжа. А животные и птицы отвечают на вопрос **что? нимә?**

Был нимә? Был эт. В русском языке: Это кто? Это собака.

Это интересно

Во многих башкирских народных сказаниях лошади уделено особое внимание. В башкирской мифологии Толпар — это сказочный крылатый конь, рождённый в пучине вод. Акбузат — крылатый небесный конь. В башкирском народном эпосе «Урал-батыр» Акбузат — верный друг башкирского батыра.

## 54 Был нимә?
## Что это?

**А** Өҫтәл янында

Ашаным бер төлкөнө,
Ҡыҙғанысмы, көлкөмө?
Крокодилды ашаным,
Фил кимерә башланым.
Ышанмаһаң, һин дә кил,
Артып ҡалды ике фил,
Өс тауыҡ, алты һарыҡ,
Ике ҡуян, ун балыҡ.
Бөтәһе лә табында —
Печеньелар ҡабында.

(Зарема Әхмәтйәнова)



**1.** Познакомься с новыми словами.



ҡаҙ — өйрәк → бәпкә

күркә — тауыҡ → себеш

П **2.** Прочитайте диалог и обсудите.



— Әсәй!
— Нимә булды, балам?
— Мине ҡаҙ баҫтырҙы.
— Бәпкәһенә тейҙеңме?
— Эйе, уйнарға ине.
— Ҡаҙ янына барма, бәпкәләренә теймә, ҡыҙым!

**3.** Расскажи интересные случаи из своей жизни.

**4.** Прочитай стихотворение. Переведи выделенные слова на русский язык.

## Бәләкәстәр

Һыйырҙың **быҙауы** бар,
Өйрәктең — **бәпкәләре**,
Аҡбайҙың — **көсөктәре**,
Тауыҡтың — **себештәре**.
Аттың **ҡолонсағы** бар,
Һарыҡтың — **бәрәстәре**.

(Айһылыу Йәғәфәрова буйынса)

**бәләкәстәр** — малыши
**тейзеңме?** — трогала?
**баҫтырзы** — погнался

## 55 Нимәгә?
## Кому? Чему?

**А** Һыйыр, ат һәм эт:

— Кеше кемде ярата? — тип һөйләшәләр.
— Мине, — ти ат. — Мин йөк ташыйым.
— Юҡ, мине, — ти һыйыр. — Мин һөт бирәм.
— Юҡ, мине, — ти эт. — Мин өй һаҡлайым.

Бер кеше был һөйләшеүҙе ишетә лә:

— Һеҙ барығыҙ ҙа беҙгә кәрәк. Беҙ һеҙҙе яратабыҙ, — ти.

(К. Ушинскийҙан)

**1.** Внимательно прочитай и сравни слова в двух столбиках. Продолжи данные ряды слов.

| **Нимә?** | **Нимәгә?** |
|---|---|
| ат | ат**ҡа** |
| суҫҡа | суҫҡа**ға** |
| әтәс | әтәс**кә** |
| күркә | күркә**гә** |
| тауыҡ | ... |
| ҡаҙ | ... |
| бәпкә | ... |

**П** **2.** Прочитайте текст.

Ильяс каникулда ауылға бара. Унда олатаһы менән өләсәһе йәшәй. Ильяс уларға ярҙам итә. Олатаһы һыйырға бесән бирә, ә ул һарыҡтарҙы ҡарай. Өләсәһе тауыҡтарҙы ашата, ә Ильяс бесәйгә һөт бирә. Ауылда тағы ла ат, кәзә, күркәләр бар. Ильяс уларҙы ла ҡарай. Олатаһы менән өләсәһе шатлана.

Ответьте на вопросы и оцените свою работу.

1. Ильяс каникулда **ҡайҙа** бара?
2. Унда **кем** йәшәй?
3. Ауылда **ниндәй** йорт хайуандары бар?



**3.** Составь предложения из данных слов.

Өлгө: Этҡә һөйәк бир.

| | | |
|---|---|---|
| һыйырға | бесән | кәрәк |
| бесәйгә | ем | кәрәкмәй |
| тауыҡҡа | һөт | бир |
| этҡә | һөйәк | бирмә |

**4.** Прочитайте и продолжите диалог.

— Айрат, һинең олатайың менән өләсәйең бармы?
— Эйе, бар.
— Улар ҡайҙа йәшәй?
— Улар ауылда йәшәй.
— Ә ҡайһы районда?
— ...

**ауыл** — деревня

**ҡарай** — смотрит, ухаживает
**бесән** — сено
**ем** — корм
**һөйәк** — кость

## 56 Ҡабатлау
## Повторение

A Сыбар тауыҡ ояһынан төштө. Себештәре йүгерешеп уйнайҙар ине. Ҡапыл улар сипылдаштылар. Себештәр янына уҫал бесәй килгән икән. Тауыҡ бесәй өҫтөнә ташланды, уның ҡолағын суҡып алды. Бесәй ҡасып китте.

Отметь правильные предложения.

1. Сыбар тауыҡ ояһынан төштө.
2. Себештәре йоҡлай ине.
3. Уҫал бесәй килгән икән.
4. Тауыҡ бесәйҙең ҡолағын суҡып алды.

**1.** Найди ошибки художника.

  бирә.

  һала.

  ташый.

  тота.

**2.** В таблице спрятаны названия домашних животных и птиц. Кто быстрее их найдёт, тот и молодец.

| | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| к | ә | з | ә | к | ө | с | ө | к |
| ү | ғ | а | т | а | у | ы | ҡ | а |
| р | ң | б | ә | р | ә | с | л | ҙ |
| к | э | т | с | у | с | ҡ | а | н |
| ә | ө | й | р | ә | к | б | ә | п |
| ҫ | һ | ы | й | ы | р | р | ә | к |

**Т** **3.** Прочитайте текст. Обсудите содержание в группе.

Иң бәләкәй ат — Горбунок. Ул ишәк кеүек оҙон ҡолаҡлы, йөнтәҫ була. Уның арҡаһында ике үркәсе лә бар. Иң ғәжәп ат — доктор Айболиттың дуҫы Тянитолкай. Уның ике башы, дүрт тояғы була, ә ҡойроғо юҡ.

Каких лошадей вы знаете?

### Это интересно

Лошадь — священное животное двадцати трёх народностей. Австралийский жеребец Нобби признан самой большой лошадью в мире. Он весит больше тонны, а его рост составляет 2,05 м. Своими объёмами конь напоминает маленький автомобиль. Миниатюрные лошади отличаются маленьким ростом (60—86 см). Вес этих крошечных лошадок колеблется в пределах 20—65 кг.

По версии Книги рекордов Гиннесса, самая маленькая в мире лошадка — Тамбелина. Её рост составляет всего 45 см, а вес — 26 кг.

**йомортҡа** — яйцо

**йөк** — воз
**ғәжәп** — удивительный (-ая, -ое)
**үркәс** — горб

# 57 Ҡабатлау
# Повторение





# 58 Ҡабатлау
# Повторение



# 59 Ҡасан?
# Когда?

**1.** Познакомься с новыми словами.



| | | |
|---|---|---|
| иртә<br>(иртәнсәк) | төш<br>(төш ваҡытында) | кис<br>(кискеһен) |

**2.** Составь предложения из данных слов.

Өлгө: Мин кис көнө киноға барам.

| | | |
|---|---|---|
| мин | иртән<br>төш ваҡытында<br>кис көнө | киноға барам<br>велосипедта йөрөйөм<br>мәктәпкә барам |

**3.** Прочитайте диалог и составьте свой по образцу.

— Атай, кискә киноға барабыҙмы?
— Эйе.
— Ниндәй кинотеатрға?
— «Кинопростор»ға. Ниндәй кино ҡарағың килә?
— «Мадагаскар». Тик 3D-ға, яраймы, атай?

**4.** Прочитай текст, заменяя рисунки словами. Оцени свою работу.

Мин  сәғәт  ҙа торам. ,  йыуам,  менән  эсәм.  менән  барам. Унда йәйге лагерь эшләй. ,  менән киноға барабыҙ, уйнайбыҙ, һүрәт төшөрәбеҙ, ярышабыҙ. Төш етә.  ҙә төшкө аш ашайбыҙ һәм өйгә ҡайтабыҙ.   лә атай менән әсәй эштән ҡайта. Каникулда рәхәт!

Т **5.** Поговорите о правилах езды на велосипеде.

**иртә** — утро
**төш** — полдень
**кис** — вечер

**йәйге** — летний (-яя, -ее)
**үткәрәбеҙ** — проводим
**рәхәт** — хорошо

## 60 Ҡасан? Когда?



А Камилдың башы ныҡ ауырта, температураһы күтәрелгән. Әсәһе врач саҡыртты. Врач:

— Камил, һыуыҡ һыу эстеңме?
— Юҡ.
— Ә нимә эшләнең?

— Иртәнән кискә тиклем велосипедта йөрөнөм.
— Бейсболка кейҙеңме?
— Юҡ.
— Төшкө эҫелә урамда бейсболкаһыҙ йөрөргә ярамай бит. Башыңа ҡояш һуҡҡан.

**1.** Научись отвечать на вопрос «Сәғәт нисә?» («Который час?»).



сәғәт бер



сәғәт беренсе ярты



ун биш минуттан бер



ун биш минут беренсе

Т **2.** Найдите в газете программу телепередач и составьте свою программу любимых передач. Обсудите в группе все программы.

**П** **3.** Крош хотел за день всё успеть, и, чтобы чего-нибудь не забыть, он завёл будильник. Помогите Крошу разобраться с часами.




**ярты** — половина

**башҡа ҡояш һуғыу** (фразеол.), **көн тейеү** — солнечный удар

## 61 Нимә менән?
## На чём?

А Мин каникулда сәғәт унда йоҡонан торам. Ун икенсе яртыла мин инде тышта велосипедта йөрөйөм, һыу инәм. Сәғәт ун биш минут икенселә төшкө аш ашайым. Сәғәт икенән дүрткә тиклем кино ҡарайым йәки компьютерҙа уйнайым. Кис, сәғәт алтыла, малайҙар менән уйнарға сығабыҙ. Сәғәт һигеҙенсе яртыла атайым менән әсәйем эштән ҡайталар. Киске аш ашайбыҙ. Шулай итеп көн үтеп тә китә.

**1.** Познакомься с новыми словами.



**П** **2.** Прочитайте и продолжите диалог.

— Мин иртәгә Төркиәгә китәм.
— Нимә менән бараһың?
— Атайым машина менән аэропортҡа алып бара. Унан самолёт менән осабыҙ.
— Поезд менән Төркиәгә барып буламы икән?
— ...

1. Расскажи о своих путешествиях.
2. Поговорите о правилах поведения на транспорте.

**3.** Прочитай стихотворение о столице. Не забывай про правильное произношение звуков и ударения.

### Баш ҡала шундай матур



Кани́кулда баш ҡалаға́
Сәйәхәтҡә́ килде́к беҙ,
Өфө́ буйла́п авто́буста
Урамдарҙа́ елде́к беҙ.

Дуҫлы́ҡ монументы́ бейе́к —
Ҡара́п торҙо́ҡ яҡында́н.
Һөйлә́й беҙгә́ башҡо́рт,
русты́ң
Ҙур дуҫлығы́ хаҡында́.

(Фаҡиһа Туғыҙбаева)

**4.** Выпиши в два столбика («Возьму с собой в путешествие» и «Оставлю дома») слова: ҡәләм, салбар, тун, туп, өҫтәл, итек, өй, һыйыр, китап, бейәләй, велосипед, ҡоймаҡ, уйынсыҡ, икмәк, тәрилкә, дәреслек, сынаяҡ, эт, кроссовки, бысаҡ, шорты, ултырғыс, сәнске, таҡта,

һөт, альбом, нетбук, кәзә, телефон, компас, рюкзак, фонарь…

Дополни таблицу своими примерами.

| Үҙем менән сәйәхәткә алам | Өйҙә ҡалдырам |
|---|---|
| Кроссовки… | Тун… |

**көн** — день

**үтеп китә** — проходит
**сәйәхәт** — путешествие
**ҡунаҡҡа** — в гости

## 62 Нимә эшләйбеҙ?
## Что мы делаем?

А Беҙ класс менән Мәскәүгә сәйәхәткә барабыҙ. Иртән сәғәт етелә мәктәп алдында йыйылабыҙ. Кәрим ағай автобус менән аэропортҡа алып бара. Сәғәт туғыҙҙа самолёт. Мәскәүҙә биш көн булабыҙ. Аҙаҡ поезд менән Өфөгә ҡайтабыҙ.

**1.** Познакомься с новыми словами.


һыу инәбеҙ


ҡояшта ҡыҙынабыҙ


еләк, бәшмәк йыябыҙ


балыҡ тотабыҙ

**2.** Шарик и кот Матроскин в письме к дяде Фёдору всё перепутали. Исправь ошибки.

Һау бул, Фёдор бабай! Ауылда бик рәхәт! Беҙ Шарик менән  тотабыҙ,  йыябыҙ. Шуға күрә ҡояшта ҡыҙынабыҙ, һыу инәбеҙ. Көндәр бик эҫе.

Һаумы, Фёдор бабай!

П **3.** Прочитайте диалог и составьте свой по образцу.

— Алло, әсәй, сәләм!
— Һаумы, ҡыҙым. Ауылда нисек?
— Ауылда рәхәт. Көндәр эҫе.
— Нимә эшләйһегеҙ?
— Ҡыҙҙар менән һыу инәбеҙ, ҡояшта ҡыҙынабыҙ.
— Өләсәйеңә ярҙам ит, ҡыҙым.
— Ярҙам итәм. Өләсәйем менән еләк йыябыҙ. Баҡсаға һыу һибәм.
— Афарин, ҡыҙым!

**эҫе** — жарко
**баҡса** — сад, огород
**еләк** — ягода
**бәшмәк** — гриб

**йыйылабыҙ** — собираемся
**шуға күрә** — поэтому
**һыу һибәм** — поливаю
**афарин** — молодец

## 63 Нимә эшләйбеҙ?
## Что мы делаем?

А Ике малай бәхәсләшә:

— Каникулда ауылда рәхәт!

— Юк, лагерҙа!

— Ауылда һыу инәбеҙ, ҡояшта ҡыҙынабыҙ.

— Лагерҙа ла.

— Ауылда малайҙар менән уйнайбыҙ!

— Лагерҙа ла.

— Ауылда еләк йыябыҙ, балыҡ тотабыҙ.

— Лагерҙа ла.

— Өләсәйем иртән ҡоймаҡ йәки бәлеш бешерә.

— ...

Запомни!

| в корне слова | окончание | примеры |
|---|---|---|
| гласные<br>о, ы, а, у, я | -быҙ | йыябыҙ<br>уйнайбыҙ<br>ашайбыҙ |
| гласные<br>ө, ү, ә, и, е, э | -беҙ | китәбеҙ<br>инәбеҙ<br>йүгерәбеҙ |

**1.** Рассмотри внимательно распорядок дня в лагере. Составь текст по рисункам. Расскажи о вашем распорядке в лагере.




Өлгө: Лагерҙа сәғәт һигеҙҙә торабыҙ. Сәғәт биштә Нептун байрамын үткәрәбеҙ.

**2.** Выразительно прочитай стихотворение. Оцени своё чтение.

## Лагерға

Уҡыуҙар бөттө,
Йәмле йәй етте.
Урман, тау, күлдәр
Беҙҙе бик көттө.

Һау бул һин, мәктәп,
Һау бул хәҙергә!
Ял итергә беҙ
Киттек лагерға.

(Шәриф Биҡҡол)

### Правила поведения на воде

Нельзя купаться в незнакомых местах. Врачи советуют купаться 20 минут, потом сделать небольшой перерыв. После длительного пребывания на солнце нельзя сразу прыгать в воду.

А знаете ли вы, как вести себя на водоёмах?

**йәй** — лето

**бәхәсләшәләр** — спорят
**үткәрәбеҙ** — проводим
**йәмле** — красивый (-ая, -ое)



Күлдәктәре гел сәсәктән,
Күҙҙәрҙе ҡамаштыра.
Ағастарында көн буйы
Ҡоштары һайрап тора.
Июнь ҡояшта ҡыҙына,
Һыу инергә ярата.
Баҡсаларҙа, ҡыуаҡтарҙа
Еләк-емеш үҫтерә.

*Гөлфиә Юнысова*

# 64 Ҡабатлау
# Повторение





Ҡәҙерле балалар!

Башҡорт теле төрки телдәре төркөмөнә ҡарай. Донъяла 100 миллиондан ашыу кеше был телдәрҙә һөйләшә.

Шиғырҙы уҡып, уларҙы иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

Дорогие ребята!

Башкирский язык относится к тюркскому семейству языков. В мире более 100 миллионов человек разговаривают на этих языках.

Прочитав стихотворение, вы узнаете, какие языки являются родственными башкирскому языку.

## Телдәр иләндә Телдәр

Телдәр — бик тә зирәк малай
Ярата туған телен,
Телдәр иләнә барған ул
Алырға аҡыл, белем.

Ҙур Телдәр иләндә Телдәр,
Балалар күплегенә
Аптыраған,
Сәләм биргән:
«Һаумы!» — тип ипле генә.

Татар менән Үзбәк уны
Ҡосаҡлаған: «Туған» — тип,

Ҡырғыҙ менән Ҡарағалпаҡ
Яратҡан, ти: «Уңған!» — тип.

Әзербайжан, Төрөкмән дә:
«Хуш килдең, Телдәр!» — тигән,—
Ҡарасай менән Балҡар ҙа
Сәләмләп башын эйгән.

Сыуаш хатта бейеп киткән,
Ҡумыҙ уйнаған Яҡут,
Өҙләгән Тыва, Алтай ҙа:
«Кәҙерле һин, — тип, — Башҡорт!»

Телдәрҙең ҡурай моңона
Йырлаған Төрөк, Уйғыр,
Нуғай менән Ҡараим да.
Оҙон булған, ти, был йыр.

Ҡумыҡ, Хакас сәсәнлектә
Ярышҡан кемуҙарҙан.
Ғағауыз менән Долған да
Ҡалышмаған уларҙан.

Ҡаҙаҡ ҡуш ҡуллап көрәшеп,
Тотторған саптар атын:
«Һабантуйҙа елдерерһең,
Данлы бит, башҡорт, затың».

Танышып, бүләк бирешеп
Бөткәс ҡәрҙәш-туғандар,
Төрки телдәрҙең тарихын
Уҡырға ултырғандар.

(Фаҡиһа Туғыҙбаева)

## Һанап ҡара әле

Бында тора бесәйҙәр,
Һана нисә бесәй бар:
Береһе уның һөт эсә,
Береһе тәҙрә төбөндә,
Береһе шкаф янында
Сысҡан сыҡҡанын көтә.
Өсәүһе йомғаҡ булып,
Йоҡлап ята төш күреп.

Әхмәттең бер алмаһы,
Әсғәттең бер алмаһы,
Бер алма бар Әсмәлә,
Бер алма бар Сафала,
Берәү өҫтәлдә ята.
Ә бөтәһе нисә алма?

(Ғариф Ғүмәр)

## Компьютер

Компьютерҙа уйнайым,
Уйнап-уйнап туймайым.
Дүрт булды ике күҙем,
Дүртәүгә әле түҙҙем.

Уйнап-уйнап туймағас,
Ваҡытты ла туймағас,
Алты булды бит күҙем,
Алтыға әле түҙҙем.

Эй компьютер, компьютер,
Минән китсе, ары тор,
Арыным мин, арыным,
Ниндәй хәлгә тарыным?

«Уйын етте!» — Аңламайым,
Айырыла алмайым,
Ун булды ике күҙем,
Унға ла әле түҙҙем.

Түҙҙем дә ул, ҡоланым,
Ҡоланым да иланым,
Ауырта шул ун күҙем,
Ҡайҙан алайым түҙем?!

Ә компьютер туҡтамай,
Туҡтарға ла уйламай,
Тиле телепузиктар
Көлә минән: «Уй, малай,
Уйнай белмәйһең уйын,
Уйын түгел дә ҡыйын!»
Йә биш, йә өс күҙҙәре,
Һаман көлә үҙҙәре,
Минән көлә үҙҙәре.

(Факиһа Туғыҙбаева)

## Олатайым ордены

Бөйөк еңеү көнөндә гел
Орден таға олатай.
— Орденыңды бир, олатай,
Мин саҡ ҡына уйнатам, —
Тигәйнем дә, күрһәндә ул:
— Орден — был, түгел тәтәй.
Тыңла, улым, һөйләгәнде,
Һин — ҙур, түгел бәләкәй.
Ат атланып, яуға саптым
Фашистар баҫҡас илде,
Улар шундай көслө ине,
Улар шундай күп ине.
Фашистарҙың танкыларын
Шартлаттым, һаны ла юҡ,
Үҙем ҡаты яраландым,
Аҡҡан, ти, ҡаным да ныҡ.
Был орденды шуның өсөн
Бирҙеләр миңә, балам.
Еңеү көнөндә уйланып,
Ҡулыма уны алам...
Бөгөн — бөйөк Еңеү көнө,
Байрам бөгөн, ҙур байрам.
Олатайым менән бергә
Мин дә байрамға барам.

(Факиһа Туғыҙбаева)

## Балалар уйыны

### Йөҙөк һалыш

Балалар теҙелешеп ултыра. Берәү «йөҙөк һалыусы» була. Ул малай-ҡыҙҙарҙың ҡулдарына йөҙөк һала. Йөҙөк һалыусы: «Кемдә йөҙөк, һикереп сыҡ», — ти. Йөҙөклө кеше һикереп торғанда, күршеләре (соседи) уны тоторға тейеш. Тотһалар, ул кешегә яза (наказание) бирелә: йырларға, бейергә, шиғыр һөйләргә, әтәс булып ҡысҡырырға.

Прочитай, заменяя рисунки словами.

## Ғаилә байрамдары. Семейные праздники

### Тыуған көн. День рождения

Асияның тыуған көнө. Әсәһе ҡыҙына  бүләк итте. Атаһы  алған. Өләсәһе  бәйләгән. Олатаһының бүләге — . Ҡартатаһы  алған. Ҡартәсәһе һүрәт төшөрөргә  бүләк итте.

Һый күп ине.  ашанылар,  бик тәмле ине. Аҙаҡтан  менән  эстеләр.

Өҫтәл артынан торғас, Асия  кейеп ҡараны.  таман. Олатаһы менән  уҡынылар, ҡартатаһы, ҡартәсәһе менән  төшөрҙөләр.

Атаһы  бергә ултыртып, фотоға төшөрҙө. Тыуған көн бик күңелле булды.

(Факиһа Туғыҙбаева)

## Дүрт ҡыҙыҡай

Дүрт ҡыҙыҡай менән әсәй килә.

— Үҙемә ҙур сумка алам, — ти әсә.

— Тағы ла дүрт бәләкәй сумка, — ти дүрт ҡыҙыҡай.

— Ҙур тараҡ (расчёска) һатып алам, — ти әсә.

— Беҙгә лә дүрт бәләкәй тараҡ, — ти дүрт ҡыҙыҡай.

— Ҙур яулыҡ (платок) һатып алам, — ти әсә.

— Тағы ла дүрт бәләкәй яулыҡ, — ти дүрт ҡыҙыҡай.

— Тағы ла иҙән йыуырға щётка алам, — ти әсә.

Дүрт ҡыҙыҡай бер һүҙ ҙә өндәшмәй.

(Д. Лукичтан)

## Дарыу

Бер ҡыҙҙың әсәһе ауырып китә. Врач ауырыуға бик әсе дарыу бирә. Ҡыҙыҡай әсәһенең дарыуҙы ҡыйынлыҡ менән эскәнен күрә лә:

— Ҡәҙерле әсәкәйем, ҡана, был әсе дарыуҙы һинең өсөн үҙем эсәйем, — ти.

(К. Ушинскийҙан)

# Башҡортса-русса һүҙлек / Башкирско-русский словарь

## А

**ағай** — брат
**ағас** — дерево
**Айҙа** — на Луне
**айыу** — медведь
**аҡ** — белый (-ая, -ое)
**аҡҡош** — лебедь
**алты** — шесть
**алтын ҡул** — золотые руки
**алтынсы** — шестой
**алыусы** — покупатель
**апай** — сестра
**арҡа** — спина
**арыҫлан** — лев
**аҫтында** — под (*предлог*)
**асыуланып** — сердито
**ат** — лошадь
**атай** — папа
**ауыҙ** — рот
**ауыл** — деревня
**ауылда** — в деревне
**ауырта** — болит
**ауыртмай** — не болит
**афарин** — молодец
**аш** — суп
**ашай** — ест
**ашайым** — ем, кушаю
**ашарға эҙләй** — ищет еду
**ашхана** — столовая
**аяҡ** — нога

## Б

**байрам** — праздник
**баҡса** — сад, огород
**бал** — мёд
**балалар** — дети
**балалар баҡсаһы** — детский сад
**балғалаҡ** — чайная ложка
**балыҡ** — рыба
**балыҡ тотабыҙ** — ловим рыбу
**бар** — есть
**бармаҡ** — палец
**бармы?** — есть ли?
**батыр** — смелый (-ая, -ое)
**баҫтырҙы** — погнался
**баш** — голова
**башҡа ҡояш һуғыу** (*фразеол.*), **көн тейеү** — солнечный удар
**беҙ** — мы
**беҙҙең** — наш
**бейек** — высоко
**бейеү** — танец
**бейәләй** — варежки
**белем** — знания
**бер** — один
**беренсе** — первый
**бесәй** — кот, кошка
**бесәй балаһы** — котёнок

**бесән** — се́но
**бешерҙе** — пригото́вила
**биҙәйбеҙ** — украша́ем
**билдә** — оце́нка
**бит** — лицо́
**битен йыуа** — умыва́ется
**биш** — пять
**бишенсе** — пя́тый
**боҙ** — лёд
**бөгөн** — сего́дня
**бөркөт** — орёл
**бутҡа** — ка́ша
**бүләк** — пода́рок
**бүре** — волк
**бүрек** — ша́пка
**быҙау** — телёнок
**бышма** — ва́ленки
**был нимә?** — что э́то?
**бысаҡ** — нож
**бысратма** — не па́чкай
**бәлеш** — пиро́г
**бәләкәй** — ма́ленький (-ая, -ое)
**бәләкәстәр** — малыши́
**бәхетле** — сча́стливый (-ая, -ое)
**бәхәсләшәләр** — спо́рят
**бәшмәк** — грибы́

## В

**ватма** — не лома́й
**врач булып** — врачо́м

## Г

**генә** — то́лько

## Ғ

**ғаилә** — семья́
**ғәжәп** — удиви́тельный (-ая, -ое)
**ғәфү ит** — извини́

## Д

**дарыу** — лека́рство
**дошман** — враг
**дөйә** — верблю́д
**дөрөҫ** — пра́вильно
**дуҫ** — друг
**дуҫтар** — друзья́
**дүрт** — четы́ре
**дүртенсе** — четвёртый
**дәрес башланды (бөттө)** — уро́к начался́ (зако́нчился)
**дәрес әҙерләй** — де́лает уро́ки
**дәреслек** — уче́бник
**дәреслектән уҡы** — чита́й по уче́бнику
**дәфтәр** — тетра́дь
**дәфтәргә яҙабыҙ** — пи́шем в тетра́ди

## Ҙ

**ҙур** — большо́й (-ая, -ое)

## Е

**ейән** — внук
**ейәнсәр** — вну́чка
**еләк** — я́года

**ем** — корм
**ерҙә** — на земле́
**ете** — семь
**етенсе** — седьмо́й

## З

**зәңгәр** — голубо́й
(-ая, -ое)

## И

**ике** — два
**икенсе** — второ́й
**икмәк** — хлеб
**инергә мөмкинме (яраймы)?** — мо́жно войти́?
**ирен** — губа́
**иртәгә** — за́втра
**иртә** — у́тро
**иртәнсәк** — у́тром
**иртәнге аш** — за́втрак
**иҫке** — ста́рый (-ая, -ое)
**ит** — мя́со
**итек** — сапоги́
**иш** — па́ра
**ишетмәйем** — не слы́шу

## Й

**йоҡлай** — спит
**йомортҡа** — яйцо́
**йомшаҡ** — мя́гкий (-ая, -ое)
**йондоҙ** — звезда́
**йортта** — в до́ме
**йөҙә** — пла́вает
**йөк** — воз
**йөнтәҫ** — мохна́тый
(-ая, -ое)
**йүнәтә** — ремонти́рует
**йығылдым** — упа́л
**йыйылабыҙ** — собира́емся
**йыйып ҡуймай** — не убира́ет
**йыр** — пе́сня
**йыябыҙ** — собира́ем
**йәй** — ле́то
**йәйге** — ле́тний (-яя, -ее)
**йәмле** — краси́вый
(-ая, -ое)
**йәшел** — зелёный (-ая,-ое)
**йәшенә** — пря́чется
**йәшәйем** — живу́
**йәшәмәйем** — не живу́

## К

**карауат** — крова́ть
**картуф** — карто́шка
**кейәм** — наде́ну, надева́ю
**киймәйем** — не наде́ну
**кемдеке?** — чей? чья? чьё?
**керпек** — ресни́ца
**кеҫә** — карма́н
**кибет** — магази́н
**килделәр** — пришли́
**кис** — ве́чер
**кис көнө** — ве́чером
**кисә** — вчера́
**китапты асығыҙ** — откро́йте кни́гу

**китапты ябығыҙ** — закройте книгу
**класс ниндәй?** — класс какой?
**көн** — день
**көслө** — сильный (-ая, -ое)
**көсөк** — щенок
**күгәрсен** — голубь
**күҙ** — глаз
**күҙ һалыу** — глаз положить
**күҙәтеп ултырам** — наблюдаю
**күк** — небо
**күңелле** — весело
**күп** — много
**күркә** — индюк
**күркә себеше** — индюшонок
**кәҙә** — коза
**кәҙә бәрәсе** — козлёнок
**кәкүк** — кукушка
**кәрәк** — надо
**кәрәкмәй** — не надо

## Ҡ

**ҡабатлай** — повторяет
**ҡаҙ** — гусь
**ҡаҙ бәпкәһе** — гусёнок
**ҡаҙы** — домашняя колбаса
**ҡайҙа?** — где?
**ҡайҙан?** — откуда?
**ҡалаҡ** — ложка
**ҡалала** — в городе
**ҡанат** — крыло
**ҡар** — снег
**ҡар бабай** — снеговик
**ҡара** — чёрный (-ая, -ое)
**ҡарай** — смотрит, ухаживает
**ҡарға** — ворона
**ҡарлуғас** — ласточка
**Ҡарһылыу** — Снегурочка
**ҡаршылай** — встречает
**ҡаса** — убегает
**ҡасан?** — когда?
**ҡаш** — бровь
**ҡоймаҡ** — блин
**ҡойроҡ** — хвост
**ҡолаҡ** — ухо
**ҡолон** — жеребёнок
**ҡорот** — курут
**ҡорт** — червь
**ҡояш** — солнце
**ҡул** — рука
**ҡул эше** — рукоделие
**ҡунаҡта** — в гости
**ҡурай** — курай
**ҡурҡаҡ** — трусливый (-ая, -ое)
**ҡурҡма** — не бойся
**ҡурсаҡ** — кукла
**ҡусты** — братишка
**ҡуян** — заяц
**ҡыҙыл** — красный (-ая, -ое)
**ҡыҙыҡ** — интересно, смешно
**ҡыҙынабыҙ** — загораем

**ҡымыҙ** — ку́мыс
**ҡысҡырған** — кри́кнул
**ҡысҡырып** — гро́мко
**Ҡыш бабай** — Дед Моро́з
**ҡәләм** — каранда́ш

## М

**май** — ма́сло
**маймыл** — обезья́на
**маңлай** — лоб
**матур** — краси́вый (-ая, -ое)
**менән** — с *(предлог)*
**мин** — я
**мин ауылда** — я в дере́вне
**мин нимә яратам?** — что я люблю́?
**мин экскурсияла** — я на экску́рсии
**минең кескәй дуҫтарым** — мои́ ма́ленькие друзья́
**минең исемем** — моё и́мя
**минең мәктәбем** — моя́ шко́ла
**миң** — ро́динка
**морон** — мо́рда
**мырылдай** — мурлы́чет
**мышы** — лось
**мәктәп** — шко́ла
**мәктәп ниндәй?** — шко́ла кака́я?

## Н

**насар** — плохо́й (-ая, -ое)
**нимә булды?** — что случи́лось?
**нимәгә?** — кому́? чему́?
**нимә менән?** — чем? с чем?
**нимә эшләй?** — что де́лает?
**нимә эшләйем?** — что де́лаю?
**ниндәй?** — како́й?
**нисек?** — как?
**ни эшләп?** — почему́?
**ныҡ баҫмағыҙ** — не то́пайте

## О

**ойоҡбаш** — носки́
**олатай, ҡартатай** — де́душка
**оса** — лета́ет
**осоп киткән** — улете́л
**осрашырбыҙ** — встре́тимся
**оя** — гнездо́

## Ө

**өйгә эш** — дома́шняя рабо́та
**өйрәк** — у́тка
**өйрәк бәпкәһе** — утёнок

**өләсәй, картәсәй** — бабушка
**өрә** — лает
**өс** — три
**өс катлы** — трёхэтажный
**өсөнсө** — третий
**өҫтөндә** — на *(предлог)*
**Өфө** — Уфа

## Р

**рәхмәт** — спасибо
**рәхәт** — хорошо

## С

**салбар** — брюки
**сана** — сани
**саңғы** — лыжи
**саф** — свежий (-ая, -ее)
**суҡыш** — клюв
**сусҡа** — свинья
**сусҡа балаһы** — поросёнок
**сыға** — выходит
**сығырға яраймы?** — можно выйти?
**сыйырсыҡ** — скворец
**сынаяҡ** — чашка
**сәй** — чай
**сәйәхәт** — путешествие
**сәксәк** — чак-чак
**сәләм** — привет
**сәнскә** — вилка
**сәс** — волосы
**сәтләүек** — орех
**сәхнә** — сцена

## Т

**таба** — сковорода
**таҙа** — чистый (-ая, -ое)
**таҡтаға сыҡ** — выйди к доске
**тамамлана** — заканчивается
**таптар** — пятна
**тарата** — раздаёт
**татыу** — дружно
**тау** — гора
**тауҙа** — на горе
**тау хужаһы** — хозяин горы
**тауыҡ** — курица
**тауыҡ себеше** — цыплёнок
**ташлама** — не бросай
**тейен** — белка
**тейҙеңме?** — трогала?
**тел** — язык
**тел йотоу** — язык проглотить
**тел сарлау** — лясы точить
**телә** — режет
**терпе** — ёж
**теш** — зуб
**тиҙҙән** — скоро
**тик** — только
**тоҡом** — порода
**торна** — журавль
**тотҡан** — поймала

**төҙөй** — строит
**төлкө** — лиса
**төш** — полдень
**төшкө аш** — обед
**туған** — родственник
**туғыҙ** — девять
**туғыҙынсы** — девятый
**туҙҙырма** — не разбрасывай
**туҡтаны** — остановился
**тумыртҡа** — дятел
**тун** — шуба
**туңдырма** — мороженое
**туп** — мяч
**турғай** — воробей
**тутыйғош** — попугай
**түгел** — не *(частица)*
**түңәрәк** — кружок
**тыуған көн** — день рождения
**тышта** — на улице
**тәмле** — вкусно
**тәнәфес** — перемена
**тәпәй** — лапы
**тәрбиәләй** — ухаживает

## У

**уйнай** — играет
**уҡый** — учится, читает
**уҡыйым** — учусь
**уҡыта** — учит
**уҡытыусы** — учитель
**уҡыусылар** — ученики
**ул** — он (она)
**ун** — десять
**унынсы** — десятый
**уның исеме** — его (её) имя
**уң** — правая (-ый, -ое)
**урамда йөрөй** — гуляет на улице
**урамында** — на улице
**уҫал** — злой
**утыҙ биш** — тридцать пять

## Ү

**үгеҙ** — бык
**үпкәләштеләр** — обиделись друг на друга
**үркәс** — горб
**үсекләй** — дразнит
**үтеп китә** — проходит
**үткәрәбеҙ** — проводим

## Ф

**фатирҙа** — в квартире
**фил** — слон
**фән** — наука, предмет

## Х

**хәйләкәр** — хитрый

## Һ

**һайрай** — поёт
**һайыҫҡан** — сорока

**һаҡ йөрө** — ходи осторожно
**һаҡлай** — охраняет
**һалбыр ҡолаҡлы** — лопоухий (-ая, -ое)
**һандуғас** — соловей
**һарыҡ** — овца
**һарыҡ бәрәсе** — ягнёнок
**һатыусы** — продавец
**һатып алды** — купил
**һау бул** — до свидания
**һау булығыҙ** — до свидания
**һаумы** — здравствуй
**һаумыһығыҙ** — здравствуйте
**һеҙ кем?** — вы кто?
**һеңле** — сестрёнка
**һигеҙ** — восемь
**һигеҙенсе** — восьмой
**һикерә** — прыгает
**һин** — ты
**һин ҡайҙа йәшәйһең?** — ты где живёшь?
**һин кем?** — ты кто?
**һинең исемең** — твоё имя
**һинең исемең нисек?** — как тебя зовут?
**һиңә нисә йәш?** — сколько тебе лет?
**һөйәк** — кость
**һөйләй** — рассказывает
**һөйләйбеҙ** — рассказываем
**һөйләштек** — договорились
**һөртә** — вытирает
**һөт** — молоко
**һуғып ала** — постукивает
**һут** — сок
**һүрәт төшөрә** — рисует
**һыйыр** — корова
**һыу** — вода
**һыуҙа** — в воде
**һыу инәбеҙ** — купаемся
**һыу һибәм** — поливаю
**һыуыҡ** — холодно

## Ш

**шауламағыҙ** — не шумите
**шаяра** — играет, шутит
**шиғыр** — стихотворение
**шишмә** — источник
**шөғөлләнәм** — занимаюсь
**шуға күрә** — поэтому
**шыршы** — ёлка
**шыуабыҙ** — катаемся

## Э

**эйе** — да
**эләбеҙ** — вешаем
**энәле** — колючий (-ая, -ее)
**эремсек** — творог
**эсендә** — в *(предлог)*, внутри
**эсәм** — пью
**эҫе** — жарко

эт — собака
эшләй — работает

## ә

әҙерләйбеҙ — готовим
әҙерләнә — готовится
әллә — не знаю
әсәй — мама

## Ю

юйғыс — ластик
юҡ — нет
юҡтыр — нет, наверное
юлбарыҫ — тигр
юрый ғына — понарошку

## Я

яҙ — весна
яҙа — пишет
яҡшы — хорошо
ял итә — отдыхает
ялбыр йөнлө
длинношёрстный (-ая, -ое)
янында, эргәһендә — рядом, возле, около
яңы — новый
яңылыштың — ошибся
яр — берег
ярҙам итә — помогает
ярты — половина
ята — лежит

## Йөкмәткеһе / Содержание


| | | | |
|---|---|---|---|
| Танышыу | 3 | Знакомство | 3 |
| Был мин | 15 | Это я | 15 |
| Минең ғаиләм | 20 | Моя семья | 20 |
| Мин нимә яратам? | 30 | Что я люблю? | 30 |
| Минең мәктәбем | 39 | Моя школа | 39 |
| Минең класым | 42 | Мой класс | 42 |
| Мин мәктәпкә йыйынам | 44 | Я собираюсь в школу | 44 |
| Мин уҡыусы | 47 | Я ученик | 47 |
| Мин дәрестә | 50 | Я на уроке | 50 |
| Мин дәрестән сыҡтым | 53 | Я вышел с уроков | 53 |
| Минең уйынсыҡтарым | 61 | Мои игрушки | 61 |
| Мин уйнарға яратам | 71 | Я люблю играть | 71 |
| Мин уйнарға сығам | 76 | Я выхожу играть | 76 |
| Мин уйнарға сыҡтым | 80 | Я вышел играть | 80 |
| Минең кескәй дуҫтарым | 83 | Мои маленькие друзья | 83 |
| Мин ял итәм | 91 | Я отдыхаю | 91 |
| Уҡыу өсөн материал | 130 | Материалы для чтения | 130 |
| Башҡортса-русса һүҙлек | 137 | Башкирско-русский словарь | 137 |

Учебное пособие

**Тулумбаев** Хасан Абдуллович
**Давлетшина** Мархаба Саяфаровна
**Гиниятуллина** Файруза Миассаровна
**Кинзябаева** Нафиса Наилевна

**БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК**

**Учебное пособие для 2 класса для изучения башкирского языка (как государственного) в общеобразовательных организациях с русским языком обучения**

(на башкирском и русском языках)

Уҡыу баҫмаһы

**Толомбаев** Хәсән Абдулла улы
**Дәүләтшина** Мәрхәбә Сәйәфәр ҡыҙы
**Ғиниәтуллина** Фәйрүзә Миәссәр ҡыҙы
**Кинйәбаева** Нәфисә Наил ҡыҙы

**БАШҠОРТ ТЕЛЕ**

**Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 2-се класы өсөн башҡорт телен (дәүләт теле булараҡ) өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

Редакция мөдире Г. А. Раянова
Мөхәррире Ә. А. Баһаманова
Рәссамы Г. Е. Голубев
Биҙәлеш мөхәррире А. Р. Мөхтәруллин
Техник мөхәррире Г. Р. Исхаҡова
Корректорҙары Ю. Р. Хәбибуллина, А. Р. Баййегетова

Баҫырға ҡул ҡуйылды 05.10.2017. Форматы 70×90 1/16. Офсет ҡағыҙы. JournalSans гарнитураһы.
Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 10,82+0,29 форз. Шартлы буяу отт. 45,03.
Иҫәп-нәшер таб. 5,95+0,525 форз. Тиражы 40610 дана. Заказ 1.0197.17.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.



Тышта ҡар яуа,
Ниндәй саф һауа!
Әйҙә сығайыҡ,
Саңғы шыуайыҡ.
Ҡырға барайыҡ,
Юлдар ярайыҡ.
Биттәр ал булыр,
Яҡшы ял булыр!

*Ҡадир Даян*




## Март

Малайҙарҙың яҙ тигәне
Эй шаян булып сыҡты.
Ҡояш менән дуҫлашты ла,
Ҡыуҙы бынан һыуыҡты.
Ул иреткәс ҡар, боҙҙарҙы,
Гөрләүектәр аҡтылар.
«Март булғанда
ҡайтыу шарт!» — тип
Ҡоштар осоп ҡайттылар.

*Гөлфиә Юнысова*